Пиши о том к чему лежит душа...
Акмулла

# Ынйылар

Бәләбәй ҡалаһы Башҡорт гимназия – интернаты гәзите № 2 (102), ноябрь 2017 йыл

## Сәскә ат, тыуған илем, алтын бишегем минең!




Башҡортостан, һин һөйөклө
гәзиз ер,
Халҡыбыҙҙың изге Ватаны.
Сал Уралдан ҡалҡа бар тарафҡа
Тыуған илдең тыныс ал таңы.

*Ҡушымта:*
Дан һиңә, Башҡортостаным!
Илен һөйгән азат халҡыңа дан!
Рәсәй менән бөйөк берҙәмлектә
Сәскә ат, Башҡортостан!

Башҡортостан, һин хөрмәтле,
данлы ил,
Еңеү яулап алға бараһың.
Киләсәккә яҡты нур-моң сәсә
Һинең ғорур рухлы байрағың.

Ҡуш Дан һиңә, Башҡортостаным!
Илен һөйгән азат халҡыңа дан!
Рәсәй менән бөйөк берҙәмлектә
Сәскә ат, Башҡортостан!

Республикам, йондоҙ булып
балҡы һин,
Күкрәп йәшә, гүзәл илебеҙ.
Тыуған ерҙә һүнмәҫ усағыбыҙ,
Тыуған телдә тынмаҫ йырыбыҙ!
***Башҡортостан***
***Республикаһының Дәүләт гимны.***
***Раuил Бикбаев, Рәшит Шәкүр***
***һүҙҙәре,***
***Фәрит Иҙрисов музыкаһы.***

### *Тыуған илем*

Минең тыуған илем - Башҡортостан. Мин уны нығ яратам. Башҡортостан Республикаһы бик матур, оло һәм бай. Был илдә минең әсәйем, атайым, туғандарым йәшәй. Уның бейек тауҙары, урмандары, сылтыр-сылтыр аҡҡан шишмәләре, йылғалары бик матур. Көн һайын таңдан башлап кискә тиклем ҡоштар һайрай, ҡояш йылмайып тора. Йәйе лә, көҙө лә, ҡышы ла, яҙы ла ваҡытында килә. Мин үҙемдең тыуған илем менән бик ғорурланам.

Тыуған илем - гөлдәр иле,
Матурлыҡҡа тырышлыҡ.
Күгәрсендәй мул йәшәгеҙ,
Һәр саҡ булһын тыныслыҡ!

Һеҙ ҙә, дуҫтар, илегеҙҙе һаҡлап, яратып йәшәгеҙ!
***Хөснөтдинова Аида, 6-сы б класы уҡыусыһы.***

### *Көҙ*

Сағыу балаҫ урмандарҙа,
Көҙ көндәре бит етте.
Ағастар һары япрағын
Матурлап ҡына йәйҙе.

Йәнлектәр ҡаса-ҡаса,
Өндәрен һәйбәтләйҙәр.
Ышыҡ урынды тапһалар,
Унда татыу йәшәйҙәр.
***Йосопова Радмила,***
***5-се б класы уҡыусыһы.***

### *Ауылым урмандары*

Беҙҙең ауыл урмандары,
Бигерәк йәмле ҡырҙары.
Йыраҡ түгел, юл буйында
Үҫеп ултыра талы.
Урманымдың бер ситендә
Бар бер ҙур матур ялан.
Киләм мин гел шул
урынға,
Еләген йыйып алам.
***Иҙиәтуллина Сулпан,***
***5-се б класы уҡыусыһы.***

### *Яратҡан гимназиям!*

Гимназиям, һин иң яҡты,
Иҫ киткес был донъяла.
Гимназиям, мәңге балҡы,
Йәшә,һин, был доньяла!
Мәңге уҡыт, мәңге өйрәт
Балаларҙы һәйбәткә.
Мәңге бейет, мәңге йырлат,
Өйрәт әйҙә шәплеккә.
Уҡытыусыларың һинен
сибәрҙәр,
Гөлдәрең бигерәк матурҙар,
Уңыштарың һинең үҙенде
биҙәйҙәр,
Шуга ла беҙ бәхетле
балалар.
***Вәлиәхмәтова Динара,***
***7-се б класы уҡыусыһы.***

### Минең әсәйем

Әсәйҙе яратмаған
Юҡтыр кеше донъяла.
“Ул бит беҙҙең бер генә,”-тип
Уйлай илдә һәр бала.
***Миһранова Юлиә,***
***5-се б класы уҡыусыһы.***

# Иле барҙың -теле бар!

Иле барҙың теле бар тип,
Халыҡ юҡҡа әйтмәгән.
Минең изге башҡорт телем,
Ил - еремде биҙәгән.





Тыуған тел - ул һәр кемгә лә ғәзиз, изгеләрҙән-изге. Мин башҡорт булыуыма ғорурланам, кинәнеп үҙ телемдә һөйләшәм.

Атай, әсәй, ил, тел - был миңә иң яҡын һүҙҙәр. Башҡорт теле бөтә йыһанға билдәле тел ул. Минең телем матур ҙа, бай ҙа, аңлайышлы ла, йомшаҡ та, нескә лә - ул һәр ерҙә яңғырай. Башҡорт теле башҡорт моңо кеүек күңелдәргә моң һала, һеңә бара. Мин телемде яратам. Башҡорт теле мәңге йәшәһен, үҫһен, илемде, еремде, халҡымдың үткәнен, бөгөнгөһөн маҡтаһын, данлаһын, телем мәңге һүнмәһен!

***Миһранова Лилиә, 2-се г класы уҡыусыһы.***





# Туған телем

Туған тел! Тыуған ергә, Ватанға оло мөхәббәт тә туған тел аша һалына, тәрбиә һабаҡтары ла туған телдә бала бәғеренә үтеп һеңә. Илдәр менән илдәр, телдәр менән телдәр тығыҙ бәйләнешкән хәҙерге заманда ғилемле кеше өсөн мөһим булған сит телдәрҙе уңышлы үҙләштереү өсөн дә, үҙ туған телеңде яҡшы белергә кәрәк. Әгәр мин туған телемде белмәһәм, үҙемде бәхетле тип тә әйтә алмаҫ инем. Минеңсә, башҡорт теле - иң матур, иң гүзәл тел һәм беҙ уны нисек бар шул килеш итеп, киләсәк быуынға еткерергә тейешбеҙ, сөнки ошо эш беҙҙең бурысыбыҙ.

Бөйөк шәхестәр, аҡыл эйәләре туған теленә һәр саҡ ихтирам һәм хөрмәт менән ҡараған... Әсә теле байлығына һоҡланған, табынған. Шул тел менән илебеҙҙең матди һәм рухи байлығын күтәргәндәр. Тыуған телдең кеше тормошондағы бөйөклөгөн шағирҙар үҙ шиғырҙарында данлаған:

Туған телем моңло көйөм,
Колағымды иркәләй
Янғырашың шундай назлы
Йырлап аҡкан шишмәләй.

Тамырҙарыбыҙ бик тәрәнгә киткән, тик уны белергә кәрәк. Әммә күптәребеҙ үҙ телен һанға һуҡмайҙар. Телен белмәгән кеше - тамырһыҙ ағас менән бер ул, ел ҡайҙа иҫһә, шул яҡка ауырға ғына тора. Мин үҙемдең башҡорт- туған телемде бик нык яратам һәм хөрмәт итәм.

***Миһранова Юлиә, 5–се б класы уҡыусыһы.***

## *Телем менән ғорурланам!*

Урман буйлап китеп барам,
Һоҡланам ағастарға,
Уға ҡунған ап-аҡ бәҫкә,
Усҡа төшкән һәр ҡарға.

Ары барам, бире барам,
Ҡоштай талпынам, осам.
Күңелдәргә тулған хисте
Шиғыр юлына һалам.

Телем минең ағас кеүек
Үҙ тамырҙарын йәйә.
Сит телде мин өйрәнһәм дә
Ҡарҙай ул иреп бөтә.

Туған тел - ул борондан
Беҙгә бирелеп килгән.
Күпме хурлыҡ кисерһә лә
Сафлығын юғалтмаған.

***Касимова Зилиә,***
***11–се а класы уҡыусыһы.***



# Башҡорт халыҡ балалар уйындары

Баланың кем икәнен белгең килһә, уйынына ҡара тигәндәр. Халҡыбыҙ борон-борондан киләсәк быуынды тәрбиәләүгә ҙур иғтибар биргән. «Ҡарға бутҡаһы», «Кәкүк сәйе» һәм башҡа байрамдарҙа тап улар өсөн уйындар ойошторолған.

Көндәлек тормошта ла сабыйҙарҙың донъяны танып белеүендә, физик һәм рухи яҡтан үсешендә, дуҫлыҡ, берҙәмлек хистәре тәрбиәләнеүендә, һәләттәрен асыуҙа, үҙ-ара мөнәсәбәттәр ҡорорға өйрәтеүҙә уйындар ярҙамға килгән. Уйындар бала саҡтың алтын биҙәге бит ул!

***Һеҙҙе барығыҙҙы ла Бәләбәй ҡалаһы Башҡорт гимназия-интернатының 22 ноябрендә уҙғарылған “Башҡорт халыҡ балалар уйындары” конкурс-фестиваленең муниципаль этабында күреүебеҙгә сикһеҙ шатбыҙ! Бөгөнгө байрамыбыҙ һеҙгә тик ыңғай тәьҫораттар ҡалдырһын! Бәйгеселәребеҙгә уңыштар теләйбеҙ!***



## Көләмәстәр

Мәктәп - интернатта әҙәбиәт дәресе бара.
-Бына, балалар, беҙ Чеховтың “Ванька” хикәйәһен уттек. Хәҙерге заманда, әлбиттә, балалар бындай хаттар яҙмайҙар...
-Нисек инде?-ти Рәмил.- Яңыраҡ ҡына Әкрәмдең өйөнә: -Олатай, алып ҡайтығыҙ мине бынан!- тип яҙғанын үҙем күрҙем.

Имтихан бара.Уҡыусы бер ни белмәй.
-Йөрәктән өҙөп булһа ла “өслө” ҡуйыр инем, әгәр уҡыусыларҙың иң йыш биргән яуабын әйтә алһағыҙ,- тигән тәҡдим индерә уҡытыусы.
-Белмәйем,-ти уҡыусы.
-Аф - фарин! Дөрөҫ.

### *Мәҡәлдәр донъяһында*

Үткән менән түгел, көткән менән.
Үткән эштән төш яҡшы.
Халыҡ теле – хаҡлыҡ теле.
Эш белгәнгә - уңыш юлдаш.
Юрағанға юш килә.
Ҡатын бәхете ирҙән.
Батыр егет яу күрке, сәсән егет – ил күрке.

### *Уйлап ҡара*

Йәйен - урманда батша, ҡышын ҡарҙан да аҫта.
Туны бар –сапаны юҡ, мыйығы бар – һаҡалы юҡ.
Ағас башында туп һымаҡ,
Ул һикереп шаяра.

У

Йә тубырсыҡ йыя,
Йә ул сәтләүек яра.
Имәнгә ҡора өйөн,
Ниндәй кейек ул?

Ҡайсы һымаҡ ҡолаҡтары,
Ҡар шикелле аҡ туны .
Эт – ҡоштарҙан аяҡтары
Йәһәт ҡотҡара уны.
Унан беҙгә юҡ зыян ,
Ниндәй йәнлек ул ?

Й

Л

Тышҡа йүгереп сыҡтыңмы,
Биттән семетеп ала.
Был нимә ул ? Ошо хаҡта
Йә әле, уйлап ҡара?

Үҙе тәрән, диңгеҙ түгел,
Һәр саҡ кереп батаһың.
Әгәр ҙә саңғыла булһаң,
Һин, әлбиттә, отаһың.

А

### *Айыуҙар*

Мин урманға барып керҙем,
Унда дүрт айыу күрҙем.
Рәхәтләнеп уйнайҙар,
Һис тә уйнап туймайҙар.
Уларға бик күңелле,
Дүртеһе лә бер төрлө.

### *Әсәкәйем*

Әсәкәйем йөрәккәйем,
Тәмле аштар бешереп,
Йомшаҡ икмәк ашатып,
Үҫтерәһең һин мине.

***Зәйнеғафаров Данил,***
***6-сы б класы уҡыусыһы.***

# Гимназиям тормошонан

*4 октябрҙән алып 21 октябргә тиклем Башҡорт гимназия-интернатында Башҡортостан Республикаһы көнөнә бағышланған саралар үҙгарылды. Һөҙөмтәләр:*

**1.“Тыуған илем – Башҡортостан” 1-4 кастар араһында һүрәттәр конкурсы:**

**1-се кластар араһында:**
1-се урын: Ртищева Анастасия, 1а.

**2-се кластар араһында:**
1-се урын: Канивец Богдан, 2б;
2-се урын: Ярыгин Егор, 2в;
3-сө урын: Шакиров Артем, 2г.

**3-сө кластар араһында:**
1-се урын: Ткачева Анастасия,3а;
2-се урын: Тәйүпов Тимур, 3а;
3-сө урын: Ефремова Ангелина, 3б.

**“Иң әүҙем ҡатнашҡан класс” номинацияһында еңеүселәр:** 2 а һәм 2 б кластар.




**2. 5 -11 кластар араһында стена газеталары конкурсы “Сәскә ат, Башҡортостан!”**
1-се урын: 5 а, 5 б кластар;
2-се урын: 8 а, 6 а кластар;
3-сө урын: 8 б, 9 б кластар.



**3.Башҡортостан – ғәзиз илгенәм! 2-4 кластар араһында яттан шиғыр һөйөүселәр бәйгеһенең һөҙөмтәләре:**



1-се урын: Миһранова Лилиә, 2г;
2-се урын: Сәҙриев Алмаз, 2б;
Насырова Аделина, 2б;
3-сө урын: Хисамова Әминә, 3а;
Әхмәтов Радмир, 3а.

**“Тыуған илгә булған һөйөүемде әйтермен тик туған телемдә” номинацияһында еңеүселәр:**
Иванова Алина,2б;
Борисова Арина,3а;
Ғәфиәтуллина Дарья,3а;
Ткачева Анастасия,3а.

**“Яратам мин илемде” номинацияһында еңеүселәр:**
Ефремова Ангелина, 3б;
Мирсаяпов Денис, 3б;
Аҙнабаева Рената, 3б.

**4. М. Кәримгә арналған күргәҙмә һәм “Хәтер кисәһе”**
1-се урын: 2а, 4б кластар;
2-се урын: 2в класы.

## *Уҡытыусыма*

Уҡытыусым- яҡын булған,
Икенсе әсәйебеҙ.
Беҙҙең өсөн эшләй улар,
Шуға ла рәхмәтлебеҙ.

Бөтә булган матур һүҙҙе,
Һеҙгә еткерәбеҙ беҙ.
Түҙемлек, бәхет, шатлыҡ,
Ҡыуаныс теләйбеҙ беҙ!

***Вәлиәхмәтова Динара,***
***7-се б класы уҡыусыһы.***

## *Балалар бик шатлана*

Уҡыу йылы башлана,
Балалар бик шатлана.
Мәктәптә уҡытыусылар
Уларҙы ҡаршы ала.

Тотоп улар ҡулдарына
Матур-матур сәскәләр,
Шатландырып бер-береһен,
Бәхет нуры сәсәләр.

***Аҙнаголова Аделина,***
***6-сы а класы уҡыусыһы.***



«Ынйылар»
Учредитель-Администрация МАОУ Башкирская гимназия-интернат г. Белебея РБ
Выходит с 1 сентября 2005 года.

Главный редактор З.Х.Исламова
Ответственная за выпуск З.Х. Исламова .
Верстка З.Х. Исламова
Редакция может не разделять мнение авторов статей.

Адрес редакции: 452000, РФ РБ, г. Белебей, ул. Морозова, 2, каб. №36
Телефон: 4-41-70, 3-21-12,
Email: Bel_bg@mail.ru
www.Bel-bgi.ucoz.ru

Газета выходит один раз в месяц в редакции МАОУ Башкирская гимназия-интернат г. Белебея РБ
Распространяется бесплатно.
Тираж 40 экз. 22. 11. 2017г. 9. 00 ч.